*Гөлкәй ҠУЖИНА,*
*Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы*

# Башҡорт мәктәбе булһын тип...

Сал тарих төпкөлөндә башҡорт халҡы иң тәрән аҡыл менән хәл иткән эш ята. Ул — Башҡортостандың үҙ ирке менән Рәсәй дәүләтенә ҡушылыуы.

Был бер сәғәт, бер көн, бер ай эсендә генә хәл ителмәгән. Башҡорт илен арҡыры-буй, буй-арҡыры нисәмә аҡыл эйәһе, ғүмерҙәрен ҡурҡыныс өҫтөнә ҡуйып, йөрөп сыҡҡандар, кәңәш ҡорғандар, бер фекергә килгәндәр. Шулай итеп, Башҡортостан тарихы Рәсәй тарихына ҙур боролош индерә. Халҡыбыҙҙың уйлап эш итә белеүенең был мөһим бер миҫалы.

1968 йылда баш ҡалабыҙҙа башҡорт мәктәбе асыу мәсьәләһен күтәреп сыҡҡан зыялыларыбыҙ Иҙел Агишев, Мөхәмәт Искужин ағайҙар ҙа Шәғәле Шаҡман, Бикбау бей кеүек түгелме ни?! Баш ҡалабыҙҙың ете районында күпме башҡорт булһа, шуларҙың һәр береһенә йөрөп, һәр өйгә бер нисә тапҡыр инеп, уҡыу йәшендәге балаларҙы яҙып сығалар, ата-әсәләргә туған телдә уҡытыуҙың зарурлығын ҡат-ҡат аңлатып йөрөйҙәр. Әлбиттә, икеләнеүселәр ҙә, баш тартыусылар ҙа була. Әммә ныҡышмалы эшләү маҡсатты яҡынайта. 1968 йылда 91-се мәктәптә I һәм II синыфты асып ебәрә алалар, ә ысын башҡорт мәктәбе 1970 йылда, Достоевский урамындағы яңы мәктәп төҙөлгәс, тәүге I—X синыф уҡыусылары менән эшләй башлай.

Мәктәптең тәүге директоры Туғаҙаҡ Илһам улы Йәһүҙин һәм завучы Лениза Абдулла ҡыҙы Хәсәнова РСФСР мәктәптәренең атҡаҙанған уҡытыусылары. Ә педагогик коллективты ул саҡтағы ҡала мәғариф бүлеге үҙе тупланы. Башҡорт мәктәбе башҡорт телен белгән башҡорт уҡытыусылары менән эш башланы. Шуныһы ғәжәп, туған телен белмәгән уҡытыусыларға тиҙ арала телде үҙләштерергә һәм уҡытыу-тәрбиә эштәрен эсә телендә алып барырға бойоролдо. Һәм шулай эш башланды. Ғүмере буйы урыҫ мәктәбендә биология уҡытҡан Лия Ғайса ҡыҙы һәр дәрес алдынан башҡорт телен һәйбәт белгән коллегаларынан теге йәки был терминды, һүҙбәйләнеште һорашмайынса дәресенә инмәҫ ине. Шул ваҡыттарҙы уйлаһам, кешенең яуаплылығына, тырышлығына иҫем китә. Берәү ҙә ”мин белмәйем, урыҫса уҡытам” тимәне. Уҡытыусылар Зәкиә Абдрахмановна, Рәзинә Ғәзизовна, Дәнүсә Мофаззаловна, Сабира Ниғмәтбаевна, Бибинур Рамазановна, Бикә Мирхәйҙәровна, Таңһылыу Ғәниевна һәм башҡалар ярышып, бер-береһенән эскерһеҙ өйрәнеп, йөктө бергә тартты.

Мәктәпте асыусыларҙың береһе Мөхәмәт ағай Искужин, һәр педсоветмы, йыйылыш булһынмы, әсә теләндә уҡытыуҙың әһәмиәтен аңлатыр, һөйләр ине. Әлбиттә, был мәсьәләнең мөһимлеген әле лә уҡытыусылар ғына түгел, мәктәп етәкселәре лә һаман аңлап етмәй. "Нимәгә бәйләнергә", "барыбер түгелме", "юғары уҡыу йортонда урыҫса уҡыталар бит" кеүек һүҙҙәр һаман да яңғырай. Фәнде белһәң, теләһә ниндәй телдә лә аңлатып була. Уҡыусыға белем алырға өйрәтергә кәрәк. Аҡмулла әйткәнсә: "Ырыҫ, дәүләт шишмәһен асам тиһәң, ғилем-һөнәр берҙәнбер әмәл булыр". Беҙҙең уҡытыусылар ырыҫ, дәүләт шишмәһен, ысынлап та, асырға өйрәттеләр. Шул Мөхәмәт ағай Искужиндың уҡыусылары, уҡытыусыларының талапсанлығы арҡаһында, авиация, нефть, медицина институттарына, БДУ-ның төрлө факультетына күпләп инә торғайны. Хатта фән докторы, кандидаттары ла бар, мәҫәлән, Илгиз Ирназаров, Фәриҙә Садиҡова һ.б.

Урыҫ теле грамматикаһын өйрәтеүҙә Фәнзиә Яҡуп ҡыҙы, Эльвира Исмәғил ҡыҙы ифрат оҫта эшләнеләр. Фәнзиә Яҡуп ҡыҙы класс етәксеһе булараҡ, уҡыусының көндәлеген тикшергәндә лә ҡулына ҡыҙыл ҡәләм тотоп, һәр хатаны төҙәтеп, аңлатып тапшырыр ине.

Ҡайһы ғына уҡытыусыны алма, һәр береһе шулай бөтмөр, йәнен биреп эшләр ине. Йылдар үткән һайын коллегаларыма һоҡланып, хөрмәтем арта. Мәрхүм Мөхәмәт Мостафа улы, Фәниә Ғилметдин ҡыҙы оло ихтирамға лайыҡтар.

Арала бер ниндәй насар уйлау, кәйеф боҙошоуҙар булманы. Былар барыһы ла мәктәп етәкселәренән килә: ғәҙел баһа, ғәҙел тәнҡиттән.

Мәктәп етәксеһе Марат Мөхәмәтйән улы Хафизов, Вил Шәйҙулла улы Бәхтейәровтар аҡыллы директор булдылар. Вил Шәйҙуллович: "Кеше яманлап яҡшы булып булмай", Марат Мөхәмәтйән улы: "Һин быны уйлап һөйләйһеңме?" тиерҙәр ине. Ә инде Хисам Салауат улы фәйләсуф, психолог, педагог та ине. Һәр һөйләгәне нигеҙле, уйы яҡты булды. Шуның өсөн дә улар педколлектив менән етәкселек иткәндә һәр береһенең эштәрендә уңыштары булды, һағынып иҫләрлек коллективы ла, ҙур уңыштарға өлгәшкән уҡыусылары ла бихисап.

Минең үҙемә килгәндә, был гимназияла 35 йылға яҡын эшләнем. Башҡа уҡытыусыларҙы эшкә иләктән үткәреп алғанда, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһын бигерәк тә. Урыҫ телле ҡала балаһына әсә телендә башҡорт теле фәнен аңлатыу өсөн күпме көс, оҫталыҡ кәрәккәнде үҙем генә беләм. Телдең матурлығын, байлығын уҡыусыларға еткереү өсөн текстар һайлау, халҡымдың бай тарихи үткәнен күҙаллау, әҙәби мираҫын, күренекле шәхестәре менән таныштырыу кеүек материалдарҙы табыу, осрашыуҙар ойоштороу ифрат күп ваҡыт һәм көс талап итте. Был эштәр эҙһеҙ үтмәне — уҡыусыларҙа фәнгә ҡыҙыҡһыныу уятһа, үҙемдә белем дә, оҫталыҡ та артты. Әлеге лә баяғы, уҡытыусының белеме, мәғлүмәте уҡыусыларында сағыла. Мин уҡытҡан уҡыусылар район, ҡала, республика кимәлендә олимпиадаларҙа еңеүсе булдылар, бик күптәр журналистика, театр сәнғәтен, тел һәм әҙәбиәт факультетын һайланы, мин улар менән ғорурланам, әле лә

онотмай уҡыусыларым. Республика етәкселеге органдарында ла баш белгес булып эшләйҙәр, ғорурланырлыҡ та, маҡтанырлыҡ та шул.

Миңә уҡыусыларымдың балаларын да уҡытыу бәхете тейҙе. Береһенән дә насар һүҙ ҙә, рәнйеш тә, ризаһыҙлыҡ та ишетмәнем, Аллаға шөкөр. Мин уларҙың барыһына ла һаулыҡ, етеш донъя, татыу ғаилә, рухи яҡтан ныҡлыҡ теләйем. Рух ныҡлығы ниндәй өлкәлә генә эшләһәң дә мөһим сифат. Үҙеңде ышаныслы тотоу сифаты хәҙерге заманда ла, элек тә мөһим булған. Әҙ һанлы халыҡтың һәр береһе, һәр кешеһе, Ш.Бабич әйтмешләй, ”Мин — даһи!” тип, йәки Ә.Вәлиди кеүек, ”Беҙ аҡтар ҙа түгел, ҡыҙылдар ҙа түгел, беҙ — башҡорттар!”, тип ғорурланырлыҡ булһын. Был өлкәлә эшләргә лә эшләргә кәрәк. Һәр әсәй, атай, һәр уҡытыусы милләте менән ғорурлана алырлыҡ бала тәрбиәләргә бурыслы, бигерәк тә был киң мәғлүмәтле, абруйлы уҡытыусыларға ҡағыла.

Эшкә инеп киткәнсә башҡорт тип яҙылып, унан һинең башҡортлоғоңдан көлөп, мыҫҡыллы ҡараш ташлап йөрөүселәр ҙә етерлек. Кеше көлдөрөп йөрөрлөк башҡорт тәрбиәләмәҫкә, Рәми ағай әйткәнсә:

”Донъяла мин — бер йән,
Бер кеше!” —

тиерлек булһын. Һәр башҡортта милләте менән ғорурланырлыҡ тәрбиә, белем биреп уҡытырға саҡырам.

20-се башҡорт гимназияһы уҡыусылары бер-береһе менән ғорурланып, шатлыҡтары менән уртаҡлашып, кәңәшләшеп йәшәй беләләр. Быны мин үҙем, класс етәксеһе булараҡ, тәүге сығарып ебәргән уҡыусыларымдан беләм. Ниндәй һөнәр кешеләре юҡ улар араһында: арбитраж суд судьяһы, юридик фәндәр кандидаты Люциә Ғүмәрова, тарих фәндәре кандидаты Әлфиә Солтанова — БДУ-ла, фән кандидаты Наилә Әбүзәрова — Өфө дәүләт авиация университетында уҡыталар.

Юристар, журналистар, уҡытыусылар, врачтар, бизнес менән шөғөлләнеүселәр — уларҙың һәр береһе хеҙмәт кешеләре, мәктәбебеҙҙең ғорурлығы. 26 уҡыусының һәр ҡайһыһы тураһында ҙур очерк, мәҡәлә яҙырға булыр ине. Ошо уҡ йылда параллель класта үҙ эшенең оҫтаһы Миләүшә Заҡуан ҡыҙы Вәлиева ла уҡыусыларын оло тормош юлына оҙатты. Ул да үҙ ҡошсоҡтары менән ғорурланып йәшәй.

Өфө ҡалаһында — баш ҡалала был мәктәп тәүге булараҡ та күҙ өҫтөндә ҡаш булды. Бер күҙәтеүсе ата-әсәләр булһа, икенсе күҙәтеүсе эреле-ваҡлы төрлө кимәлдәге партия, совет, профсоюз хеҙмәткәрҙәре. Мәктәптең директорҙарына күпме баҫым аҫтында эшләргә тура килгәндер. Элекке уҡытыусылар әле осрашабыҙ ҙа, ул замандарға хайран-вайран ҡалабыҙ. Барыбыҙ ҙа түҙгәнбеҙ, йөктө бер мисәүҙә тартҡанбыҙ: 730 баланы ауыҙына ҡаратып тота алған физкультура уҡытыусыһы Владимир Генрихович Мартенс, мөләйем, йомшаҡ һүҙле, уҡыусыларҙы ифрат ныҡ яратҡан химия уҡытыусыһы Ольга Богдановна Брумовская, башланғыс синыфтарҙа эшләгән, үҙ эшенең оҫтаһы Бибинур Рамазан ҡыҙы Билалова — был патриоттарҙы нисек онотаһың да, нисек уларға һоҡланмайһың. Студент эскәмйәһенән генә килгән Рәүфә Мөхөтдин ҡыҙы

Илһамова, урыҫ мәктәбендә бер нисә йыл эшләп килгән Рина Мөхәмәт ҡыҙы Минһажева-Уразаева, фекерҙәштәрем-шәкерттәрем Зилә Шәфҡәт ҡыҙы Яппарова, Рәйсә Абдрахман ҡыҙы Күзбәкова, Диана Диас ҡыҙы Закироваларҙы онотоу мөмкинме һуң?! Уйҙар үткәнгә ҡайтҡан һайын уҡытыусы-тәрбиәселәр Ғәзилә Таһировна, Рәйсә Гәрәевна, Зөбәйҙә Фәсхетдиновна, Хәбирә Хәбировна, Зөлфиә Ташбулатовна, Гөлсирә Камиловна, Гөлсирә Ғилмановна, китапханасы Зилә Сәлимйән ҡыҙы һәм башҡаларҙы йылы хистәр менән иҫкә алам. Ваҡытында үҙ эштәренә баһа ла һорамаған, тик эш өсөн яратылған быуын кешеләре ине улар. Уҡытыусы башҡа кеше тормошо менән йәшәй бит ул. Бишектәге баланы әҙәм итеп осороусы бит ул уҡытыусы, Рәми Ғарипов әйтмешләй,

”Бишектәге бала биш төрләнеп,<br>
Ат атланып сапмаҫ, тимәгеҙ!”

Балаларҙың атҡа атланып сабып киткәнен ҡул болғап оҙатып ҡалыусылар беҙ, уҡытыусылар, бөгөн дә уларҙың йөрәк тибешен тойоп йәшәйбеҙ.

***Гөлсирә ҠАҒАРМАНОВА,***<br>
***Фатима Мостафина исемендәге***<br>
***20-се һанлы Өфө ҡала башҡорт гимназияһы***<br>
***директоры урынбаҫары***

# 20-се мәктәп-гимназия традицияларын һаҡлай

Торғонлоҡ осоронда, милли мәктәптәргә иғтибар аҙ булған саҡтарҙа асылып, төрлө ауырлыҡтар менән эшләп килгән 20-се мәктәп 90-сы йылдарҙағы үҙгәрештәр башланғас юғалып ҡалманы, ә киреһенсә, тағы ла юғарыраҡ үрҙәргә үрләне.

1990 йылда директор булып Х.С.Хәйбуллин килеү менән, мәктәп коллективы йәмғиәттәге демократик үҙгәрештәрҙе иҫәпкә алып, балаларға белем-тәрбиә биреү эшендә эҙләнеүҙәр юлына баҫты: яңы тормош шарттарында үҙенә урын табырлыҡ, халҡына уңышлы хеҙмәт итә алырлыҡ шәхес тәрбиәләү бурысы ине алда. Ошо юғары маҡсаттар 20-се мәктәпте гимназия статусына еткереп, уҡытыу технологияларын инновациялар нигеҙенә күсереүгә алып килде. Ошо эштәрҙе башҡарып сығыу өсөн ”Ватан” ғилми-тикшеренеү үҙәге булдырылды. Гимназияның алдынғы уҡытыусылары үҙәкте етәкләгән ғалимдар менән берлектә республикалағы башҡортса уҡытылған башланғыс синыфтар өсөн инновацион технологиялар әҙерләне. Ф.Ш.Сынбулатова һәм Ә.Т.Мәүлийәрова ”Камил-